# БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ АЛФАВИТЫ ҺӘМ ОРФОГРАФИЯҺЫ

ИИЯЛ

РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
РФА ӨФӨ ҒИЛМИ ҮҘӘГЕ
ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕНЕҢ АЛФАВИТЫ ҺӘМ ОРФОГРАФИЯҺЫ

Өфө
2007

БР халыҡтары телдәрен
һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү
дәүләт Программаһы сиктәрендә баҫтырыла

©Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты

### Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Ҡарары
### Башҡорт әҙәби теле орфографияһына индерелгән үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр тураһында

1. СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан башҡорт әҙәби теле орфографияһына индерелгән үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр проектын раҫларға.

2. «Башҡорт теленең үҙгәртелгән һәм өҫтәлгән орфографияһын практикаға индереү тәртибен» раҫларға.

3. Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетына «Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһын» яңы редакцияла айырым брошюра итеп 1982 йылдың I кварталынан да һуңламай баҫып сығарырға.

4. Республиканың бөтә дәүләт учреждениеларына һәм нәшриәт органдарына эш барышында башҡорт теле орфографияһының раҫланған ҡағиҙәләрен ныҡлы үтәүҙе тәҡдим итергә.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы
Председателе Ф. СОЛТАНОВ
Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы
Секретары Ф. ХИСМӘТУЛЛИН

Өфө. 1981 йыл, 22 октябрь.

## I. АЛФАВИТ ҺӘМ ОРФОГРАФИЯ ПРИНЦИПТАРЫ

1. Башҡорт әҙәби теленең алфавиты рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән. Рус алфавитындағы бөтә хәрефтәр үҙ яҙылышынса рус алфавитындағы тәртиптә алынған. Башҡорт теленең һ һәм ә өндәренән башҡа үҙенә хас өндәре рус алфавитындағы әйтелештәре яҡын булған өндәр өсөн ҡулланылған хәрефтәрҙән сығып, түбәндәгесә яһалған: **ғ, ҙ, ҡ, ң, ҫ, ү, ө.**

**һ** һәм **ә** өндәре өсөн шул уҡ **һ, ә** хәрефтәре алынған.

2. Башҡорт теленең орфографияһы башҡорт әҙәби теленә нигеҙләнә.

3. Башҡорт теленең орфографияһы рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙең фонетик, морфологик һәм график үҙенсәлектәрен иғтибарға алыу нигеҙендә төҙөлә.

## § 1. Алфавит

Башҡорт теленең алфавиты 42 хәрефтән тора.

Уларҙың урынлашыу тәртибе:

| Баҫма хәрефтәр | Хәрефтәр исеме | Баҫма хәрефтәр | Хәрефтәр исеме | Баҫма хәрефтәр | Хәрефтәр исеме |
|---|---|---|---|---|---|
| Аа | а | Ҡҡ | ҡы | Фф | эф |
| Бб | бэ | Лл | эл | Хх | ха |
| Вв | вэ | Мм | эм | Һһ | һы |
| Гг | гэ | Нн | эн | Цц | цэ |
| Ғғ | ғы | Ңң | эң | Чч | че |
| Дд | дэ | Оо | о | Шш | ша |
| Ҙҙ | ҙы | Өө | ө | Щщ | ща |
| Ее | е | Пп | пэ | ъ | ҡалын айырыу билдәһе |
| Ёё | йо | Рр | эр | Ыы | ы |
| Жж | жэ | Сс | эс | ь | нәҙеклек һәм нәҙек айырыу билдәһе |
| Зз | зэ | Ҫҫ | ҫе | | |
| Ии | и | Тт | тэ | Ээ | э |
| Йй | й | Уу | у | Әә | ә |
| | | | | Юю | йу |
| Кк | ка | Үү | ү | Яя | йа |

## § 2. Алфавиттағы хәрефтәрҙең бүленеше

Һуҙынҡылар: а, е, ё, и, о, ө, у, ү, ы, э, ә, ю, я.

Тартынҡылар: а) яңғырау: б, в, г, ғ, д, ҙ, ж, з, й, л, м, н, ң, р;

б) һаңғырау: к, ҡ, п, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ.

Махсус билдәләр: ъ, ь.

## II. ҺУҘЫНҠЫЛАР ЯҘЫЛЫШЫ

### § 3. А – а

А – а һүҙҙәрҙең ҡалын ижектәрендә яҙыла: *ат, арба, сана, афиша, машина, магазин, гараж, лампа, ҡара, ҡала, парта, таҡта, ағас, алма, баҡса.*

### § 4. Е – е

А. Е – **е** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә ике төрлө функция үтәй:

а) һүҙ башында – **йэ** тигән ике өндө белдерә: *ел, ең, еҙ, еләк, еç, ем, еүеш;*

б) ижек уртаһында һәм ижек аҙағында э өнөн белдерә: *бел, беҙ, һеҙ, теҙ, кей, кейеҙ, кейем, теймә, әрсе, бейе, тейен, эйе.*

Б. Рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә **е** хәрефе рус орфографияһы нигеҙендә яҙыла: *Европа, Енисей, техника, цех, трест, поезд, герой, телефон, тема, система.*

### § 5. Ё – ё

Ё – ё хәрефе рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: *ёлка, щётка.*

### § 6. И – и

А. **И – и** хәрефе бер ижекле һүҙҙәрҙә һәм нәҙек ижек янында нәҙек өндө, ә ҡалын ижек янында ҡалын өндө белдерә:

а) *ил, бит, кисә, киле, нигеҙ, ниәт, исем, кәмит;*

б) *сиҡан, сираҡ, синыф, ижад, тарих, Шафиҡ.*

Б. Башҡорт теленә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәргә **и** рус орфографияһы нигеҙендә яҙыла: *тир* (ата торған урын), *кит* (диңгеҙ хайуаны), *биолог, кино, станция, вафли, Украина.*

### § 7. О – о, Ө – ө

А. **О – о** хәрефе ике өнгә билдә булып йөрөй:

а) төп башҡорт һүҙҙәрендә ҡалын һуҙынҡы ирен өнө булған **о** өнөнә: *он, ос, оло, ҡолон, болон, һоло, ҡорос, боронғо, ҡоролош, ҡоролошо;*

б) рус әҙәби теленән үҙләштерелгән һүҙҙәргә ҡалын һу-

ҙынҡы **о** өнөнә: *завод, производство, пароход, агроном, профком, трактор, доктор, мотор, фронт, совет, кино, фото, район.*

Б. **Ө – ө** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә нәҙек ижектәрҙә яҙыла: *көн, төн, көндөҙ, көсөргәнеш, бөгөн, төтөн, Өфө, өлгө, төлкө, төрлө, өмөт, төҙөлөш.*

В. Беренсе ижектәрендә **о** йәки **ө** өндәре булған төп башҡорт һүҙҙәренең башҡа ижектәрендә **а, ә, у, ү** һәм **и** өндәренең береһе килмәһә, бөтә ижектәрендә лә **о – ө** яҙылышы һаҡлана: *оҙон, оҙонлоғо, оҙонлоғоноң; төҙө, төҙөлөш, төҙөлөшөнөң.*

Әгәр ҙә бындай һүҙҙәрҙең ҡалған ижектәрендә **а, ә, у, ү, и** өндәренең береһе килһә, уларҙың һуңғы ижектәрендә **ы, е** хәрефтәре яҙыла: *тойоуы, ҡоралы, төҙөүе, мөмкинлек, һөжүме.*

## § 8. У – у, Ү – ү

А. **У – у** хәрефе ҡалын ижектәрҙә яҙыла: *ур, уҙ, ут, Урал, уйһыу, ултырыш, уңыш, усаҡ, уяу, ауыҙ, буйлы, буҫтау, дуҫ, ҡуҙаҡ, суртан, турғай, матур.*

Б. **Ү – ү** хәрефе нәҙек ижектәрҙә яҙыла: *үлән, үр, үт, үткер, бүҙәнә, бүлмә, бүләк, дүрткел, күлдәк, күңелле, күл, күн, һүҙ.*

В. Шул уҡ **у – ү** хәрефтәре һүҙ уртаһында һәм аҙағында ирен тартынҡыһын да белдерә һәм башҡорт телендәге ҡалын һүҙҙәрҙә **у**, нәҙек һүҙҙәрҙә **ү** менән бирелә:

а) *ауыл, дауыл, тауар, тауыш, яуын, һыу, быу, хайуан;*

б) *әүен, рәүеш, әүәләү, кәүҙә, кейәү.*

Г. Исем ҡылым ялғауы **-ыу – -еү, -оу – -өү** рәүешендә яҙыла: *барыу, килеү, ҡайтыу, күреү, йонсоу, тойоу, йөрөү, йөҙөү.*

## § 9. Ы – ы

**Ы – ы** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә ҡалын ижектә, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы нигеҙендә яҙыла: *ыласын, ырғаҡ, ырҙын, ихтыяр, хыял, ҡыяр, шыма, зыян, музыка, Сызрань.*

## § 10. Э – э

**Э – э** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә э өнө ишетелгән урындарҙа һүҙ башында ғына, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы нигеҙендә яҙыла:

а) *эл, элек, эш, эшсе, элемтә, эре, эркет, эйә, эйәләшеү;*

б) *электр, экран, экскурсия, аэростат, поэма.*

## § 11. Ә – ә

**Ә – ә** хәрефе һүҙҙең нәҙек ижектәреңдә яҙыла: *әрем, әрәмә, бәке, бәләкәй, әйт, әйтелеш, тәҙрә, мәғәнә, мәл, мәрәкә, ҡәләм, Ғәлимә, сәғәт, Бәләбәй, мәҡәл, мәҡәлә, мәрмәр, бәрхәт, бәрәкәт, әһәмиәт, вәғәҙә.*

## § 12. Ю – ю

**Ю – ю** хәрефе **йу** ишетелгән урындарҙа һәм рус теленән ингән һүҙҙәрҙә рус орфографияһындағыса яҙыла:

а) *юл, юҡ, юрған, юлдаш, юғары, юйғыс, Юлай;*

б) *юстиция, юрист, юбилей, июнь, июль, резолюция, компьютер, Люксембург, бюллетень, бюро, меню.*

## § 13. Я – я

**Я – я** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә **йа** ишетелгән урындарҙа, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә рус теле орфографияһы нигеҙендә яҙыла:

а) *яр, ял, яй, ярыш, аяҙ, аяҡ, таяҡ, маяҡ;*

б) *тай – тая, ҡуй – ҡуя;*

в) *якорь, Рязань, Галя.*

# III. ТАРТЫНҠЫЛАР ЯҘЫЛЫШЫ*

## § 14. Б – б

А. **Б – б** хәрефе **б** өнө ишетелгән урындарҙа яҙыла: *бысаҡ, бәке, беше, балаҫ, быяла, бойҙай, балан, бала, быйыл.*

Б. Рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙәге **б** һәр ерҙә һаҡлана: *багажник, бакен, герб, клуб, лаборант, обсерватория, штаб.*

## § 15. В – в

**В – в** хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башындағы ирен тартынҡыһы **у – у** урынына, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә

* Яҙылышы бөтә урында ла бер төрлө булған хәрефтәр бында бирелмәне.

рус теле орфографияһы нигеҙендә яҙыла:

а) *ваҡ, ваҡлыҡ, ваҡиға, ваҡыт, ватан, вәғәҙә, Вәли;*

б) *велосипед, вагон, венгр, вокзал, автомобиль, автор, архив, Кавказ.*

## § 16. Г – г

Г – г хәрефе башҡорт һүҙҙәрендә нәҙек ижектәрҙә генә, ә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә ҡалын ижектәрҙә лә, нәҙек ижектәрҙә лә яҙыла: *гөл, өлгөр, һиҙгер, түгел, һигеҙ, тигеҙ, география, бригада, зоология, грамматика, лозунг, флаг, газ, гектар, гараж, митинг.*

## § 17. Ғ – ғ

Ғ – ғ хәрефе ҡалын ижектәрҙә лә, нәҙек ижектәрҙә лә яҙыла: *ағас, һағыҙ, сәғәт, ҡәнәғәт, мәғәнә, ғәҙәт, ғүмер, ғәжәп, ғәфү, яға, саған, бағана, Ғәлим, Ғәлимә.*

## § 18. Д – д

А. Д – д хәрефе ҡалын ижектәрҙә лә, нәҙек ижектәрҙә лә яҙыла: *Дим, дала, дана, дары, дауа, дага, донъя, дым, доктор, ҡондоҙ, көндөҙ, падишаһ.*

Б. Рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙәге **д** һәр ерҙә һаҡлана: *отряд, завод, команда, метод, доклад, медик, педагог.*

## § 19. Ҙ – ҙ

Ҙ – ҙ хәрефе түбәндәге урындарҙа яҙыла:

а) ижек башында: *ғә-ҙәт, ҡы-ҙыл, я-ҙылыш, кү-ҙәнәк, Хәмиҙә, Әхмә-ҙи, ҙур, ҙурайыу;*

б) ижек аҙағында: *яҙ, күҙ, көм-бәҙ, күҙ-лек.*

## § 20. Й – й

Й – й хәрефе түбәндәге урындарҙа яҙыла:

а) һүҙ һәм ижек башында **о, ө, ү, ы, ә** алдынан: *йомғаҡ, йөрө, бойор, бөйөр; йүгән, йүкә, йүн, Йүрүҙән; йыл, йыйылыш, быйыл, уҡыйыҡ; кинйә, йәй, йәйәү, кейәү, йәшел;*

б) һүҙ уртаһындағы ижек башында **е** алдынан: *кейем, кейеҙ, эшләйек, кейенәм, бейейек;*

Иҫкәрмә: **и** өнөнә бөткән төп башҡорт һүҙҙәренә ялғау

ҡушҡанда **е** алдынан **й** яҙылмай: *ти – тиелгән, ни – ниең, етди – етдиерәк.*

в) һүҙ һәм ижек аҙағында: *йәй, үрсей, көй, ай, айлыҡ, кейҙе, майҙан, бийма, уҡыйбыҙ, эшләйбеҙ;*

г) ижек уртаһында: *әйт, ҡайт.*

## § 21. К – к, Ҡ – ҡ

А. К – **к** хәрефе нәҙек ижектәрҙә лә, ҡалын ижектәрҙә лә яҙыла: *күл, күлдәк, күк, кәм, күп, икмәк, элек, көмөш, тәүлек, кадр, техника, блок, клуб, комбайн.*

Б. Ҡ – **ҡ** хәрефе башҡорт телендәге ҡалын **ҡ** өнөнә билдә итеп алына һәм ишетелгән бөтә урында яҙыла: *ҡамыш, ҡанат, ҡаплан, арҡан, ҡом, ҡойҡа, ҡул, тоҡ, ҡәләм, ҡалын, ҡыҙыл, ҡош, ҡәмәр, ҡәҙерле, ҡояш, аҡҡош, ҡәйнә, ҡырмыҫҡа, ҡаушырыу, ҡамасау.*

В. Һүҙ аҙағында килгән **к – ҡ**, һүҙҙәрҙең үҙгәреүе менән ике һуҙынҡы араһында ҡалғанда, әйтелешкә эйәртеп, **г – ғ** хәрефтәренә әйләндереп яҙыла: *күлдәк – күлдәге, итек – итеге, техник – техниги, балыҡ – балығы, тоҡ – тоғо.*

## § 22. Л – л

Тамыры **л** өнөнә бөткән, шулай уҡ уртаһында **л** өнө килгән ҡылымдарҙа **л** хәрефе төшөрмәй яҙыла: *кил – килтер, тул – тултыр, ултыр – ултырып.*

## § 23. Ң – ң

Ң – **ң** хәрефе тартынҡы **ң** өнөнә билдә итеп алына: *аң, таң, аңра, миңрәү, һаңғырау, саң, киң, аңҡау, тәңкә, яңғыҙаҡ, еңгә, мәңге, өйәңке, ҡараңғы, ыңғырашыу.*

## § 24. П – п

А. П – **п** хәрефе **п** өнө ишетелгән урындарҙа яҙыла: *иптәш, күп, мәктәп, парта, пальто, полюс, поляк, практика, тапҡыр, япраҡ, япма.*

Б. Тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәрҙең аҙағында һуҙынҡы өндән һуң килгән **п**, һүҙҙең үҙгәреүе менән ике һуҙынҡы араһында

ҡалһа, әйтелешкә эйәртеп, б хәрефе менән яҙыла: *китап – китабы, толоп – толобо, мәктәп – мәктәбе, принцип – принцибы, тип – тибы, тап – табы, күп – күбәйеү.*

## § 25. Ç – ç

Ç – ç хәрефе ижек аҙағында һәм һуҙынҡыларҙан һуң килгән ижек башында яҙыла: *арыҫлан, ҡыҫҡа, баҫҡыс, баҫым, иҫке, бүҫкә, һоҫа, ҡыҫала, уҫаҡ, таҫыл, киҫәк, күҫәк.*

Иҫкәрмә: Ҡайһы бер ҡылымдарҙа һәм көнсығыш телдәренән ингән исемдәрҙә һуҙынҡыларҙан һуң h яҙыла: *яһау, Баһау, Бәһиә, баһа* h. б.

## § 26. h – h

h – h хәрефе түбәндәге урындарҙа яҙыла:

а) һүҙ башында: *һыйыр, һарыҡ, һайыҫҡан, һаман, һепер, һеңле, һәм, һурпа;*

б) һүҙ уртаһында тартынҡыларҙан һуң килгән ижек башында: *аҡһаҡ, бурһыҡ, туҡһан, һикһән, апһын, типһен, ҡауырһын, анһат;*

в) ялғауҙар башында: *барһа, алһа, ашаһа, белһен, йәшәһен, ҡараһыу, балаһы, кәмәһе, бирәһе, киләһе.*

## § 27. Ц – ц

Ц – ц хәрефе башҡорт теленә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: *пицца, мотоцикл, цех, целлюлоза, целлофан, цирк, циркуль, концерт.*

## § 28. Ч – ч

Ч – ч хәрефе башҡорт теленә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: *чинар, учреждение, почта, чех, чек, чемпион, чукот, форточка.*

## § 29. Щ – щ

Щ – щ хәрефе башҡорт теленә рус әҙәби теленән ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла: *плащ, щётка, Щедрин, Щербаков, щит, щи, борщ.*

### § 30. ъ – ь

А. **ъ** билдәһе алдағы ҡалын тартынҡы йәки һуҙынҡы өндө айырып әйткәнде белдереү өсөн ҡулланыла: *ҡулъяулыҡ, алъяпҡыс, донъя, съезд, подъезд, маъмай, даръя.*

Б. **ь** билдәһе ике осраҡта ҡулланыла:

а) алдағы тартынҡы өндөң нәҙеклеген белдереү өсөн: *кальқа, кальций, портфель, роль, Харьков, Горький, асфальт;*

б) тауышты өҙөп, алдағы нәҙек тартынҡы йәки һуҙынҡы өндө айырып әйткәнде белдереү өсөн: *көньяҡ, бирьяҡ, мәсьәлә, Ильяс, Ильин, тәьмин, Мөьмин.*

## IV. ҺҮҘҘӘР ҺӘМ ЯЛҒАУҘАР ЯҘЫЛЫШЫ

### § 31. Ябай һүҙҙәр яҙылышы

А. Тамыр йә нигеҙ һүҙ эсендә баҫымлы **-о-/-ө-, -ы-/-е-** һуҙынҡылары булһа, ялғау ҡушҡанда төшөрөп ҡалдырмай яҙыла:

а) *онот- – онотолған, онотоу; йөрө- – йөрөтөлгән, йөрөтөү;*

б) *синыф – синыфы, синыфына; урын – урыны, урынында; исем – исеме, исемендә; хәреф – хәрефе, хәрефенә; бер – береһе, береһенән* һ. б.

Ләкин һуңғы ижектәге шул уҡ баҫымлы **-о-/-ө-, -ы-/-е-** һуҙынҡылары сифат яһаусы **-и** ялғауы ҡушылғанда һәм *ирек, бүрек, халыҡ, милек, холоҡ* һүҙҙәренә эйәлек ялғауы ҡушылғанда төшөп ҡала:

а) *синыф – синфи, ғилем – ғилми* һ. б.

б) *ирек – ирке, бүрек – бүрке, халыҡ – халҡы, милек – милке, холоҡ – холҡо.*

Б. 1. Тамыр һүҙ эсеңдәге асыҡ ишетелмәй торған баҫымһыҙ **-о-/-ө-, -ы-/-е-** һуҙынҡылары **-р-** алдына тура килгәндә яҙылмай: *аңра, аҫрау, биҙрәү, бөҙрә, бөкрө, бысраҡ, иңрәү, йоҙроҡ, йомро, кәкре, күкрәк, кәпрәйеү, кәпрән, ҡойроҡ, мөңрәү, осрау, сепрәк, сүпрә, тетрәү, тоғро, томра, төпрә, тупраҡ, тыҙрайыу, тыҡрыҡ, тәҙрә, уғры, әкрен, әүрәү, япраҡ, яурын* һ. б.

Ләкин шул уҡ **-р-** алдынан килгән **-о-/-ө-, -ы-/-е-** яһалма һүҙ-

ҙең нигеҙендәге баҫымлы ижектә торһа, яҙыуҙа улар һаҡлана: *бойор- – бойороҡ, айыр- – айырым, төкөр- – төкөрөк, йүткер- – йүткерек* һ. б.

2. Аҙағы **-рҡ/-рк, -лҡ/-лк** ҡуш тартынҡылары менән бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда, һуңғы **-ҡ/-к** өндәре **-ғ/-г** менән сиратлашмаһа, ҡуш тартынҡылар араһында бер ваҡытта ла **-о-/-ө-, -ы-/-е-** хәрефтәре яҙылмай:

а) *ҡырҡ (40) – ҡырҡынсы; ҡырҡ- – ҡырҡа, ҡырҡыу, ҡырҡты; ҡурҡ- – ҡурҡа, ҡурҡҡан, ҡурҡыу; һарҡ- – һарҡыу, һарҡа, һарҡҡан; күрк – күрке, күркле, күркәм* һ. б.

б) *ҡалҡ- – ҡалҡа, ҡалҡытыу, ҡалҡыр; йолҡ- – йолҡа, йолҡто, йолҡор; һелк- – һелкеү, һелкә, һелкте* һ. б.

3. Аҙағы **-ыш/-еш, -ош/-өш** менән бөткән һүҙҙәрҙән **-ай/-әй** ялғауы ярҙамында ҡылым яһалғанда, һуңғы ижектәге **-ы-/-е, -о /-е-** төшөп ҡала: *аңыш – аңшайыу, бәлеш – бәлшәйеү, кәүеш – кәүшәйеү, салыш – салшайыу, ҡыйыш – ҡыйшайыу* һ. б.

В. Тартынҡы өнгә бөткән һүҙҙәргә **-раҡ/-рәк** ялғауы ҡушылғанда, ялғау алдына **-о-/-ө-, -ы-/-е-** хәрефтәре ҡуйып яҙыла: *төҙ – төҙөрәк, оҙон – оҙонораҡ, аҙ – аҙыраҡ, алыҫ – алыҫыраҡ, күп – күберәк.*

Г. 1. Һүҙ эсендәге **-нг-/-нғ-, -нк-/-нҡ-** һәм **-ңг-/-ңғ-, -ңк-/-ңҡ-** ҡуш тартынҡыларында **-н-, -ң-** хәрефтәренең яҙылышы түбәндәгесә билдәләнә:

Әгәр ул **-н** өнөнә бөткән нигеҙҙән **-ге/-ғы, -ке/-ҡы** ялғауҙары менән яһалған һүҙ булһа, **- н -** менән яҙыла: *алдын – алдынғы, борон – боронғо, түбән – түбәнге, бошон- – бошонҡо, ҡоторон- – ҡоторонҡо, тартын- – тартынҡы* һ. б.

Нигеҙ һүҙҙең эсендә булһа, **-ң-** менән яҙыла: *диңгеҙ, зәңгәр, ҡараңғы, ҡорсаңғы, мәңге, саңғы, сәңгелдәк, һаңғырау, тәңкә, өйәңке* һ. б.

2. Аҙағы **-ң-** менән бөткән оҡшатыу һүҙҙәренән **-ғыра** ялғауына ҡушып яһалған ҡылымдарҙа һәм шул ҡылымдан яһалған исемдәрҙә **-ғ-** хәрефе һаҡлана: *яңғыра-, сыңғыра-, ҡыңғырау* һ. б.

Ғ. Һүҙ эсендә йәки аҙағында **-н** өнөнән һуң **-б, -м** өндәренең береһе килһә, **-н** өнө **-м** булып ишетелә, ләкин яҙғанда **-н** яҙыла: *ун бер, барғанмын* һ. б.

1. Башҡорт теленә рус яҙма теленән ингән һүҙҙәрҙең тамыр һәм нигеҙ өлөштәре рус орфографияһы нигеҙендә яҙыла: *революция, идея, океан, клуб* һ. б.

2. Башҡорт теленә инеп, фонетик яҡтан үҙләшеп бөткән рус һүҙҙәре башҡортса әйтелешендә яҙыла: *багур, дисәтинә, калуш, карап, карауат, кеүәҫ, көршәк, матрас, милтә, мисәт, перәник, пинжәк, плитә, сажин, ялыу, замаскы, кәрнис, кәнфит, кәрзин, кәстрүл, кукуруз, минут, әлиф, бумазый, лампасый, эшләпә, ыҫмала* һ. б.

## § 32. Ҡушма һүҙҙәр яҙылышы

А. **Ҡушып яҙыу**. Үҙ-ара грамматик мөнәсәбәттәрен юғалтып, берәй нәмәгә йәки бер бөтөн төшөнсәгә атама булып киткән, бер һүҙ берәмегенә әүерелгән ҡушма һүҙҙәр ҡушып яҙыла.

1. Тәүге һүҙе аныҡлаусы мәғәнәһен юғалтып, икеһе бергә бер атама булып киткәндә:

а) *айғолаҡ, айыуғорт, ағалтын, йыланбалыҡ, сүмесбаш; аҡбалыҡ, аҡҡош, аҡтамыр* (үлән), *аҡһаҡал* (ырыу уҙаманы), *аҡһөйәк* (юғары ҡатлам кешеһе), *алабуға, алабута, билбау, ҡарабойҙай, ҡарағалпаҡ* (халыҡ исеме), *ҡарағас, ҡарағат, ҡарағош, ҡыҙылғанат, сәмрегош, терегөмөш, тораташ, хужабикә, һынташ, янартау, ярғанат, бишбармаҡ* (аш), *осҡат* (ағас), *һигеҙгүҙ* (һөйәк), *меңьяпраҡ* (үлән), *өсмөйөш* (геометрик фигура) һ.б.

б) *көньяҡ, төньяҡ, аръяҡ, бирьяҡ.*

Иҫкәрмә: Шул уҡ **яҡ** менән килгән һүҙҙәрҙең ҡалғандары, ике аралағы грамматик мөнәсәбәт һәм һәр береһенең үҙ баҫымы һаҡланған өсөн, айырым яҙыла: *арғы яҡ, бирге яҡ, аҫ яҡ, өҫ яҡ, ос яҡ, төп яҡ, ур яҡ, түбән яҡ, уң яҡ, һул яҡ, арт яҡ, ал яҡ, ян яҡ* һ. б.

2. Эйәлек мөнәсәбәте менән яһалып та, аҙағындағы эйәлек ялғауы юғалған булғанда: *балғалаҡ (бал ҡалағы* урынына), *гөлйемеш, китапхана, ҡолонҡойроҡ* (үлән), *ҡульяҙма, ҡульяулыҡ, һабантуй, һабантурғай* һ. б.

3. Ике һүҙ араһындағы мәғәнә мөнәсәбәте юғалып, бер һүҙ берәмегенә әүерелгәндә: *барыбер, быйыл, бөгөн, берүк* (мәҫәлән, *берүк кешегә әйтмә,* ләкин *бер үк кеше)* һ. б.

4. Исем менән сифат ҡылымдан йәки **-ыш** ялғаулы исем

ҡылымдан яһалған атама булғанда: *елғыуар, һыубаҫар, йөҙйәшәр, илгиҙәр, юлбаҫар, урынбаҫар, көнбайыш, көнсығыш, көнкүреш* һ. б.

5. Туғанлыҡ-ҡәрҙәшлек атамалары: *ҡәйенбикә, ҡәйенһеңле, ҡайнаға, олатай, өләсәй* һ. б.

6. Кеше исемдәре һәм хайуан ҡушаматтары: *Алмабикә, Алсынбикә, Аҡйегет, Әхмәтғәли, Миңлеғәли, Шәрифйән, Аҡбаш* (һыйыр), *Аҡтүш, Еҙтырнаҡ, Ҡарағолаҡ, Ертыңлар, Ҡулуртлар, Тауҙытауғаһуғар* (әкиәт батырҙары).

7. Руссаға оҡшатып яһалған терминдар: *еҫҡорма, тәүшарт, үҙидара, үҙйөрөшлө, тәүтормош, үҙҡиммәт, үҙешмәкәр, ысынбарлыҡ, ярымсул, ярымутрау* һ. б.

8. Бергә яҙылған ҡушма һүҙҙәр үҙ-ара түбәндәгесә ялғана:

1) Уларҙың икенсе өлөшө айырым йөрөгәндә **е-** хәрефе менән башлап яҙылған булһа, ҡушма һүҙ эсендә дөйөм ҡағиҙәгә буйһоноп, **-йе-** итеп яҙыла: *Аҡйегет, Гөлйемеш, Баййегет, Меңйетәр.*

2) Тәүге өлөшөнөң аҙағындағы йәки икенсе өлөшөнөң башындағы **ҡ-/к-** өндәре һуҙынҡы уртаһында ҡалһа, әйтелештәгесә **-ғ-/-г-** итеп яҙыла: *Ағиҙел, ҡарағалпаҡ, ҡарағош, терегөмөш, Ҡарағолаҡ.*

3) Тәүге өлөшөнөң аҙағындағы һуҙынҡынан һуң **-р, -л, -у, -ҙ, -й** өндәренең береһе килеп, икенсе өлөшө **ҡ-/к-** менән башланһа, **ҡ-/к-** әйтелештәгесә **-ғ-/-г-** итеп яҙыла: *ярғанат, ҡыҙылғанат, балғалаҡ, елғыуар, һигеҙгүҙ, айғолаҡ.*

4) Урталағы йәнәшә килгән ике һуҙынҡының береһе төшөп ҡала: *Ҡариҙел, олатай, ҡарағас* һ. б.

Б. **Айырып яҙыу.** Икеһе бергә теүәл бер төшөнсә белдерһәлә, үҙ-ара грамматик мөнәсәбәттәрен юғалтмаған, бер һүҙ берәмегенә әүерелмәгән, һәр береһе үҙ баҫымы менән әйтелгән ҡушма һүҙҙәр айырып яҙыла.

1. Тәүге һүҙ аныҡлаусы мәғәнәһен һаҡлағанда йәки бер нәмәне икенсеһенән айырып килгәндә:

а) *бала саҡ* (мәҫәлән, *бәхетле бала саҡ*), *аҡ ҡурғаш, ҡара ҡурғаш, ҡара ҡарға, суйыр таш, һоро күмер; тимер юл, таш күмер; баш мәҡәлә, баш ҡала, баш һүҙ, баш бала; ялан аяҡ, ялан баш, ялан күлдәк; артлы ултырғыс, ҡойроҡло йондоҙ;*

б) *аҡһыл күк, алма сыбар* (ләкин ат ҡушаматы: *Алмасы-*

*бар*), *бурлат ҡыҙыл, сейә ҡыҙыл, тимер күк, ҡара йәшел, алһыу ҡыҙыл* һ. б.

2. Ике һүҙзең һәр береһе үҙ мәғәнәһен һәм ике аралағы мәғәнә мөнәсәбәтен һаҡлағанда:

а) *ат ҡараусы, бала ҡараусы;*

б) *кеше йәнле, ҡаты бәғерле, ҡуш йөрәкле, үҙе йөрөмәле, әсе телле; ҡара эсле, бер ҡатлы, үҙ аллы, үҙ белдекле, үҙ һүҙле; аяҡ өҫтө, аяҡ үрә, баш түбән, йөҙ түбән;*

в) *ҡаҙау һурғыс, шәкәр ватҡыс, баш ҡатырғыс, йөрәк әрнеткес, ҡот осҡос, иҫ киткес, хәл иткес; һыу һаҡлағыс, газ үткәргес;*

г) *ғәфү итмәҫлек, хайран ҡалырлыҡ, түҙә алмаҫлыҡ;*

ғ) *тиҙ йөрөүсән, эш һөйөүсән;*

д) *бер көнлөк, биш йыллыҡ* (план), *ете йыллыҡ, өс айлыҡ;*

ҙ) *көн элек, көн элгәре;*

е) *кем уҙарҙан, кем еңерҙән, ас ҡарындай, ерле юҡҡа;*

ё) *быуындан быуынға, өйҙән өйгә* һ. б.

3. Ике һүҙ араһындағы мөнәсәбәт грамматик форма (эйәлек ялғауы) менән бирелгәндә: *айыу көпшәһе, ат ҡуҙғалағы, ҡайын еләге, сүл бүреһе; ишек алды, күҙ ҡараһы, ҡаҙ үләне, ҡара һауыты, тәртә төбө* (бау); *бесәй табаны* (үлән), *күгәрсен күҙе* (сәскә), *кәзә мөгөҙө* (емеш), *кәзә һаҡалы* (үлән), *энә ҡарағы* (бөжәк).

4. Тәүге өлөшө **бөтә, күп, бер, тәү, һис, һәр** кеүек һүҙзәрҙән булғанда:

а) *бөтә Башҡортостан, бөтә донъя, күп милләтле, күп миллионлы, күп һанлы; бер ҡалып, бер милләт, бер туған, бер тигән;*

б) *бер ауыҙҙан, бер күңелдән, бер рәттән, бер тауыштан, бер фекерҙән, бер һүҙҙән, бер ыңғайҙан, бер ыңғай, бер юлы; бер килке, бер яҡлы, бер һүҙһеҙ, бер туҡтауһыҙ; тәү тапҡыр, тәү башлап, һис булмаһа, һис һүҙһеҙ, һис шикһеҙ; һәр ваҡыт, һәр йылы, һәр көн, һәр яҡлап;*

в) *бер кем, бер нәмә, бер нисә, бер үҙе, һис бер, һис бер ҡайҙа, һис бер нәмә, һис бер кем, һәр бер, һәр кем, һәр нәмә, һәр ҡайһыһы.*

5. Икенсе өлөшө **алды, арты** кеүек ярҙамлыҡ исемдәрҙән булғанда: *һайлау алды, ял алды, баҙар арты, байрам арты* (көн) һ. б.

6. Ҡушма һандар: *ун бер, ун биш, ун туғыҙ, егерме алты.*

7. Үҙ-ара **да-дә** теркәүесе менән бәйләнеп, ҡатып ҡалған һүҙҙәр: *ал да гел, һин дә мин* һ. б.

В. **Һыҙыҡса аша яҙыу.** Бер үк йәки бер иш һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән яһалған ҡушма һүҙҙәр һыҙыҡса аша яҙыла.

1. Бер үк һүҙ: а) *буй-буй, ваҡ-ваҡ, матур-матур, тимгел-тимгел, төрлө-төрлө, юлаҡ-юлаҡ, саҡ-саҡ, бер-бер;*

б) *илай-илай, көйшәй-көйшәй; туҡтап-туҡтап, әҙләп-әҙләп.*

2. Бер иш һүҙҙәр: а) *ағай-эне, аң-белем, баш-тояҡ, бала-ҡаза, ир-ат, йәш-елкенсәк, ҡайғы-хәсрәт, талаш-тартыш, тел-әҙәбиәт, туған-ырыу, физика-математика, эшсе-крәҫтиән, юҡ-бар, төньяҡ- көнсығыш;*

б) *кәкре-бөкрө, аллы-гөллө, күкле-йәшелле, эреле-ваҡлы; ингән-сыҡҡан, килгән-киткән, күргән-белгән, ҡаҡҡан-һуҡҡан, ҡасҡан-боҫҡан, тапҡан-таянған;*

в) *айырым-асыҡ, көс-хәл* (менән), *ярым-ярты; ваҡытлы-ваҡытһыҙ, белер-белмәҫ, уҡыр-уҡымаҫ, эшләр-эшләмәҫ; йәйен-ҡышын, көнө-төнө; аллы-артлы, арлы-бирле, аҫлы-өҫлө, иртәле-кисле, уңлы-һуллы, яҙлы-көҙлө, килделе-киттеле, ағалы-энеле, аталы-уллы, абына-һөрөнә, бата-сума; ҡасып-боҫоп, өҙөп-йолҡоп;*

г) *ул-был, уға-быға, унан-бынан, унда-бында;*

ғ) *аһ-зар, ай-һай* һ. б.

3. Төп һүҙ менән уның эйәрсене:

а) *ҡыйыш-мыйыш, ҡырлы-мырлы, салыш-солош, тишек-тошоҡ, һыныҡ-мыныҡ, ярты-йорто;*

б) *алпан-толпан, ашыҡ-бошоҡ, һирәк-мирәк, әрәм-шәрәм, әштер-өштөр, берәм-һәрәм* һ. б.

4. Эйәреп килгән **ара** ярҙамлыҡ исеме: *икәү-ара, үҙ-ара, район-ара, халыҡ-ара һ. б.*

5. Эйәреп килгән **фәлән, маҙар** кеүек һүҙҙәр:

а) *кеше-фәлән, күстәнәс-фәлән; эт-маҙар, бүре-маҙар;*

б) *күрһә-фәлән, уҡыһа-фәлән* һ. б.

6. Эйәреп килгән **ни** һәм **нитеү** һүҙе:

а) *арбаһы-ние, тауышы-ние;*

б) *уйлап-нитеп, оялып-нитеп; алһа-нитһә, күрһә-нитһә* һ. б.

7. Ҡушар йөрөгән атамалар: *генерал-майор, дизель-мотор, Премьер-министр, штаб-квартира.*

8. Сәйәси фирҡә һәм йүнәлештәрҙең, улар эсенә ингән кешеләрҙең ҡушар атамаһы, ошо атамаларҙан яһалған шартлы сифаттар:

а) *социал-демократия, анархо-синдикализм;*

б) *социал-демократик* һ. б.

9. Ҡатмарлы үлсәү берәмектәре: *киловатт-сәғәт, тонна-километр* һ. б.

10. Көсәйтеү киҫәксәһе менән килгән ҡатмарлы һүҙҙәр: *ап-аҡ, бәп-бәләкәй, йәп-йәшел, кәп-кәкре, нап-насар, тап-таҡыр, төп-төҙ, күм-күк; сем-ҡара, дөм-ҡараңғы, өр-яңы, көпә-көндөҙ.*

11. Ике өлөшө лә бер үк һүҙҙән торған һүҙ бәйләнеше араһындағы грамматик форма юғалғанда: *үҙ-үҙен, бер-береһен* һ.б.

12. Ҡабатланған бер үк һүҙ грамматик форма менән бәйләнһә лә, ике һүҙ дөйөм бер мәғәнә алғанда:

а) *асыҡтан-асыҡ, буйҙан-буй; берҙән-бер, берен-бере, үҙенән-үҙе;*

б) *батырҙарҙың-батыры, матурҙарҙың-матуры, зәһәрҙең-зәһәре;*

в) *ҙурайғандан-ҙурая, ҡыҫҡарғандан-ҡыҫҡара, көсәйгәндән-көсәйә, ҡыҙғандан-ҡыҙа;*

г) *күҙгә-күҙ* (ҡарап), *ҡулға-ҡул* (тотошоп) һ. б.

13. Ике сик араһын белдергән һүҙҙәр һәм һандар һыҙыҡ аша яҙыла: *Өфө – Мәскәү поезы, 1976 – 1980 йылдар, 4 –* 5 метр һ. б.

## § 33. Яңғыҙлыҡ исемдәр һәм атамалар яҙылышы

А. 1. Ер-һыу атамаларының диалекталь фонетик үҙенсәлектәре әҙәби телгә үҙгәртелмәй алына: *Атауҙы* (күл), *һаттыҡ* (ауыл), *Суртанды* (күл), *Уләнде* (күл), *Таҙлар* (ауыл) һ. б.

2. Ер-һыу атамаларының төп атама өлөшөнә ингән бөтә һүҙҙәр ҡушып яҙыла: *Атсабар* (ауыл), *Баламйәбеш* (тау), *Биштәкә* (ауыл), *Бүралған* (тау), *һыйырғасҡан* (тау), *Алайғыр* (ауыл).

3. Ике үҙ аллы атаманан ҡушарлап яһалған ер-һыу атамаларының һәр өлөшө ҙур хәреф менән һыҙыҡса аша яҙыла: *Колтай-Ҡаран* (ауыл), *Еҙем-Ҡаран* (ауыл), *Ҡаран-Ҡуңкас* (ауыл), *Ҡыпсаҡ-Асҡар* (ауыл), *Ҡаңны-Төркәй* (ауыл) һ. б.

4. Ер-һыу атамаһына аныҡлаусы булып килгән һүҙҙәр ҙур хәреф менән айырым яҙыла: *Оло Эйек, Кесе Эйек* (йылғалар), *Беренсе Этҡол, Икенсе Этҡол* (ауылдар), *Иҫке Ҡаратаулы, Яңы Ҡаратаулы, Үрге Йәркәй* (ауылдар) һ. б.

Ләкин аныҡлаусы үҙ мәғәнәһен һәм баҫымын юғалтып, аныҡланыусы менән бергә бер бөтөн атама яһауҙа ҡатнашһа, ҡушып яҙыла: *Һарығамыш* (ауыл), *Ҡараяҡуп* (ауыл) һ. б.

5. Төп атамаға эйәреп килгән терминдар бәләкәй хәреф менән айырым яҙыла: *Урал тауы, Һаҡмар йылғаһы, Октябрь проспекты, Әй урамы, Пушкин бульвары* һ. б.

Ләкин шул терминдар эйәлек ялғауын юғалтып, төп атама менән ҡушылһа, бергә яҙыла: *Ҡарауылтау, Ямантау, Стәрлетамаҡ, Арҡауыл, Яңауыл, Ағиҙел, Аҡкүл, Уралтау* һ. б.

Иҫкәрмә: *Аҡ диңгеҙ, Ҡара диңгеҙ, Ҡыҙыл диңгеҙ, Һары диңгеҙ* кеүек рус теленән алынған атамалар айырым яҙыла.

Б. 1. Төрлө ойошма атамаларының һәм башҡа яңғыҙлыҡ исемдәрҙең төп өлөшө ҙур хәреф менән, уға эйәреп килгән терминдар бәләкәй хәреф менән яҙыла: *Өфө дәүләт нефть техник университеты, Белорет металлургия комбинаты, Өфө ғилми үҙәге, Башҡортостан фәндәр академияһы һ.б.*

2. Шартлы исемдәр тырнаҡ эсенә алына: *«Ирәндек» магазины, «Ҡарлуғас» ательеһы* һ. б.

Ошо иҫәптән гәзит, журнал, китап, әҫәр исемдәре, төрлө машина һәм башҡа нәмәләрҙең шартлы атамалары ла ҙур хәреф менән яҙылып, тырнаҡ эсенә алына: *«Ағиҙел» журналы, «Башҡортостан» гәзите, «Ҡан» романы, «Волга» машинаһы, «Союз-5» карабы, «Ромашка» кәнфите* һ. б.

Был атамалар **исемендәге** тигән һүҙ менән килһә, тырнаҡ ҡуйылмай: *Мостай Кәрим исемендәге башҡорт гимназияһы, Салауат Юлаев исемендәге хоккей клубы һ. б.*

Тырнаҡ эсенә алынған һүҙҙәрҙең ялғауы тырнаҡ тышына сығарылмай: *«Башҡортостан ҡыҙында» сыҡҡан мәҡәлә, «Ысын кеше тураһындағы повесты» уҡыным.*

3. Төрлө машина йәки техник ҡорамалдың шартлы атамаһын түгел, маркаһын белдергән билдәләр тырнаҡ эсенә алынмай яҙыла: *ГАЗ-69 машинаһы, Т-34 танкыһы, Ил-18 самолеты* һ. б.

## § 34. Ярҙамлыҡ һүҙҙәр яҙылышы

А. 1. Йыйыу, бәйләү теркәүесе һәм көсәйтеү киҫәксәһе булып йөрөгән **ла-лә, ҙа-ҙә, да-дә, та-тә** айырым яҙыла; был киҫәксәләр, ялғау кеүек үк, сингармонизм законына буйһона, йәғни нәҙек һүҙҙән һуң нәҙек, ҡалын һүҙҙән һуң ҡалын була: *һин дә мин, бар ҙа ал, эшләй ҙә ашай; Юлай ҙа, Шәрип тә килгән; тауышы ла сыҡмай, бөтәһе лә бында* һ. б.

Иҫкәрмә: Ҡәнәғәтлекте белдергән **әлдә** һүҙендәге **дә** ҡушып яҙыла: *әлдә килдең әле, әлдә ямғыр яуманы.*

2. Сикләү, конкретлау киҫәксәләре булып йөрөгән **уҡ-үк, ғына-генә, ҡына-кенә** шулай уҡ айырым яҙыла; был киҫәксәләр сингармонизм законына буйһоноп, нәҙек һүҙҙән һуң нәҙек, ҡалын һүҙҙән һуң ҡалын итеп яҙыла: *алғас уҡ, әйтеп үк; ул ғына, һине генә, саҡ ҡына, өс кенә* һ. б.

Иҫкәрмә: 1) Түбәндәге һүҙҙәрҙә **уҡ-үк** ҡушып яҙыла: *әйҙүк* (түрҙән уҙ), *берүк* (әйтмә);

2) Иркәләүҙе аңлатҡанда, **ғына-генә, ҡына-кенә** ҡушып яҙыла: *балағынам, күҙгенәм* һ. б.

3. Көсәйтеү, раҫлау киҫәксәһенең тулы формаһында һәр компонент үҙенә башҡа айырым яҙыла: *күргән дә баһа, ямғыр ҙа баһа, эт тә баһа, асҡан да баһа, килә лә баһа, осло ла баһа;* ҡыҫҡа формаһы ҡушып яҙыла: *алған даһа, эшләй ҙәһә* һ. б.

4. **Икән, иһә, ине** ярҙамлыҡ ҡылымдары айырым яҙыла: *бармы икән, бар икән; ул иһә, яҡшылыҡ иһә, йә иһә, ала ине, килер ине.*

Б. 1. Үтенеү, ялыныу киҫәксәләре булып йөрөгән **һана-һәнә, сы-се, со-сө** ҡушып яҙыла: *барһана, әйтһәнә; бирсе, торсо, йөрөсө.*

2. Икеләнеү киҫәксәһе булып йөрөгән **лыр-лер, ҙыр-ҙер, дыр-дер, тыр-тер** ҡушып яҙыла: *баралыр, күргәндер, эшләйҙер* һ. б.

Һорау киҫәксәһенән һуң килә торған **ни** алмашы айырым яҙыла: *бирҙеме ни, беләме ни* һ. б.

## § 35. Ялғауҙар яҙылышы

А. Ялғауҙар бөтәһе лә ҡушып яҙыла.

Б. Башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә ялғауҙың ҡалынлыҡ-

нәҙеклеге нигеҙгә ҡарап билдәләнә, йәғни нигеҙе ҡалын һүҙгә ҡалын ялғау ҡушыла: *арба – арбаны, ҡолон – ҡолонға, ҡыш – ҡыштың, туҙ – туҙҙың;* нигеҙе нәҙек һүҙгә нәҙек ялғау ҡушыла: *бесәй – бесәйгә, ит – иттән, дөгө – дөгөнөң, сүл – сүлдәр.*

В. Рус әҙәби теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауы ҡалынлыҡ-нәҙеклек йәһәтенән түбәндәгесә билдәләнә:

1. Йомшаҡ тартынҡыға бөткән һүҙҙәргә:

а) Аҙағы **-ль, -нь** менән килһә йәки ике тартынҡы менән бөтөп, һуңғыһы йомшаҡ булһа, нәҙек ялғау ҡушыла: *июль – июлдә, фестиваль – фестивалгә, автомобиль – автомобилде, нуль – нулде, гениаль – гениаллек; июнь – июндә, поршень – поршендән, шампунь – шампунгә, пристань – пристандәр; Рязань – Рязангә, Сызрань – Сызрандә; ферзь – ферзде, нефть – нефтте, Пермь – Пермдә, верфь – верфте* һ. б.

б) Аҙағы **-рь, -сь, -чь, -шь** менән килһә, ҡалын ялғау ҡушыла: *секретарь – секретарға, лагерь – лагерҙа; перепись – переписта; картечь – картечты; тушь – тушҡа, гуашь – гуаштың.*

Ялғау ҡушҡанда һүҙ аҙағындағы **-ь** билдәһе һәр ваҡыт төшөп ҡала.

Иҫкәрмә: Аҙағы **-сть** менән бөткән һүҙҙәргә, һуңғы **-ть** төшөрөп ҡалдырылып, ҡалын ялғау ҡушыла: *ведомость – ведомоста, власть – власы, часть – часҡа, повесть – повестың.*

2. Һуҙынҡы, ҡаты тартынҡы йәки **-й** менән бөткән рус һәм сит тел һүҙҙәренә ҡалын ялғау ҡушыла: *лупа – лупаны, какао – какаоға; жюри – жюриҙы, пони – пониҙы, такси – таксиҙа, мари – мариҙар, коньки – конькиға, Сочи – Сочиға; желе – желенан, атташе – атташела, каноэ – каноэға, Улан-Удэ – Улан-Удэла, предприятие – предприятиела, ателье – ательенан, Приморье – Приморьела, меню – менюҙы, интервью – интервьюнан, идея – идеяны; кий – кийҙы, калий – калийҙан, кафетерий – кафетерийҙа, юбилей – юбилейға, мавзолей – мавзолейҙа, музей – музейҙа, адыгей – адыгейҙар, Алтай – Алтайҙа, Горький – Горькийҙа; командир – командирға, вазелин – вазелинға, аппетит – аппетитлы, гибрид – гибридтар, алюмин – алюминдан, щит – щитҡа, приз – призға, кит – киттың, миф – мифты,*

*факел – факелға, факультет – факультетта, дуэт – дуэттың, актер – актерҙар; парашют – парашютлы, приют – приютта, снаряд – снарядтан, пункт – пункттан, оттиск – оттискынан, статист – статисҡа, лабиринт – лабиринтта, резерв – резервҡа, конгресс – конгресҡа, интеллект – интеллектты, фильтр – фильтрлы, цилиндр – цилиндрҙа, регистр – регистрға, министр – министрҙы; ритм – ритмлы, цифр – цифрға, негр – негрҙан, серб – сербтар, люкс – люкста; рейд – рейдҡа, сейф – сейфта, бассейн – бассейндың, дюйм – дюймда; вальс – вальсҡа, асфальт – асфальтта, вольт – вольттың, пульс – пульсы, фильм – фильмды, рельс – рельстан.*

3. Рус телендәге **-ев, -ин** формалары менән яһалған башҡорт фамилияларына, нигеҙе нәҙек булһа, нәҙек ялғау, нигеҙе ҡалын булһа, ҡалын ялғау ҡушыла: *Исмәғилевте, Ғәлиевкә, Әхмәтшингә; Байышевтан, Юлдашевҡа, Мостафиндың, Сафинды* һ. б.

Г. Ғәрәп-фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең һуңғы ижеге **-и-** менән килеп, унан алдағы ижеге ҡалын булһа, ҡалын ялғау ҡушыла: *ғалим – ғалимды, ғашиҡ – ғашиҡтар, тарих – тарихта, мәғариф – мәғарифта, шаһит – шаһитты, Ҡадир – Ҡадирға, Шафиҡ – Шафиҡты, Харис – Харистан, Камил — Камилға.*

Ғ. 1. Аҙағы **-ск, -нг, -нк** менән бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда, ике араға **-ы-** ҡуйып яҙыла: *отпуск – отпускыла, диск – дискыны, пропуск – пропускыға; лозунг – лозунгылар, лозунгыһы; митинг – митингыға, митингыһы; танк – танкыны, танкыһы; банк – банкыла, банкыһы* һ. б.

Шул уҡ **-ск** менән бөткән ҡала исемдәренә ялғау ҡушҡанда **-и-** өҫтәп яҙыла: *Омск – Омскиға, Минск – Минскиҙа.*

2. Аҙағында **-сть, -ст, -фт, -зд** торған һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда, һуңғы **-т, -ть, -д** төшөп ҡала: *трест – тресҡа, солист – солисы, атеист – атеистың, текст – текста; власть – власҡа, волость – волоста; ландшафт – ландшафы, шрифт – шрифы; поезд – поезға, подъезд – подъезға.*

Ә яңғыҙлыҡ исемдәрҙә **-т** һаҡлана: *Кронштадт – Кронштадтта, Шмидт – Шмидтты, Брест – Бресҡа.*

3. Һүҙ аҙағындағы ҡуш тартынҡының береһе ялғау ҡуш-

ҡанда төшөп ҡала: *кросс – кросҡа, металл – металы, грамм – грамдың, грипп – гриптан, ватт – ватты.*

Ә яңғыҙлыҡ исемдәрҙә аҙаҡтағы ҡуш тартынҡы һаҡлана: *Донбасс – Донбасста, Томас Манн – Томас Манндың.*

4. Аҙағы **-пп, -кк** менән бөткән һүҙҙәргә һуҙынҡы менән башланған ялғау ҡушҡанда, тороп ҡалған бер **-п** һәм **-к** башҡа һүҙҙәрҙәге кеүек үк, **-б, -г** хәрефенә күсә: *грипп – грибы* һ.б.

5. Аҙағы **-и, -у, -ю(у)** менән бөткән сит һүҙҙәргә, һуңғы өн һуҙынҡы итеп түгел, дифтонгылаштырып әйтелгән өсөн, **-ҙ** менән башланған ялғау ҡушыла: *такси – таксиҙар, таксиҙа; Баку – Бакуҙан, Бакуҙың; меню – менюҙан, менюҙы һ.* б.

Шул һүҙҙәрҙең аҙағы **-и** менән бөткәндәренә эйәлек ялғауы ҡушҡанда, араға **-й-** ҡуйып яҙыла: *йөк таксийы, католиктар руханийы.*

6. Аҙағы ҡаты **-к, -г** менән бөткән сит һүҙҙәргә **-к** менән башланған ялғау ҡушыла: *барак – баракка, металлург – металлургка* һ. б.

Д. Ҡыҫҡартылған һүҙҙәргә ялғау тулы әйтелешенә түгел, ҡыҫҡа әйтелешенә ҡарап ҡушыла; һүҙ менән ялғау араһында һыҙыҡса ҡуйыла: *РФ-тың, БР-ҙа, АҠШ-ҡа.*

Е. 1. Цифрҙарға ялғау һыҙыҡса аша ҡушыла: *5-се, 6-ға, 10-ды.*

2. Рим цифрҙарынан һәм датаны белдергән ғәрәп цифрҙарынан һуң рәт һанын белдергән ялғау яҙылмай: *X синыф, V бүлек, 1973 йыл, 9 декабрь.*

3. 1) Ҡылым яһаусы **-ла** ялғауы бер урында ла дүрт бөгө-лөш законына* буйһонмай, гел бер вариантта ғына йөрөй: *ҙурлау, матурлау, ғырлау, тығырлау (тығырлаҡ), дуңғырлау (дуңғырлаҡ); суҡанлау, ырғанлау, сыпранлау.*

2) Һүҙ эсендә лә дүрт бөгөлөш законы һаҡланмай: *бөрлөгән, аҡсарлаҡ, төйлөгән, тәгәрлек, үңлек.*

3) Үҙе бер бөтөн булып нығынған **-ылда** ялғауы, борондан ҡатып ҡалған айырым һүҙҙәр генә шул законға яраҡлашҡан көйө ҡала: *ахылдау, шаҡылдау, ғырылдау; урындыҡ, ҡарындыҡ* һ. б.

---

* Сингармонизм законының ялғау башындағы һәм һүҙ эсендәге **л, ҙ, д, т** өндәренең сиратлашыуына ҡағылған айырым бер күренеше.

## V. ҘУР ХӘРЕФТӘР ЯҘЫЛЫШЫ

Ҙур хәреф менән башлап яҙыла:

1. Һөйләм башындағы һүҙҙәр.

2. Яңғыҙлыҡ исемдәр һәм ҡушаматтар: *Өфө, Урал, Рәшит Ниғмәти, Әсхәл Әхмәт-Хужа, Аҡъял батыр; Юпитер, Галактика; Аҡтырнаҡ, Ҡараҡолаҡ* һ. б.

Иҫкәрмә: Ҡояш, ер, ай һүҙҙәре күк есеме булараҡ атап әйтелгәндә ҙур хәреф менән, башҡа ваҡытта бәләкәй хәреф менән яҙыла: *Ерҙең барлыҡҡа килеүе, Ҡояштағы таптар,* ләкин *ҡояш сыҡты, ер йәшәрҙе.*

3. Төрлө ойошма һәм предприятиеларҙың бер нисә һүҙҙән торған атамаһындағы тәүге һүҙ: *Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Башҡорт дәүләт академия драма театры, Башҡорт дәүләт медицина университеты h.б.*

Иҫкәрмә: Бер нисә һүҙҙән яһалған иң юғары дәүләт органдарының, иң мөһим халыҡ-ара ойошмаларҙың, шулай уҡ ил-дәүләттәрҙең ҡатмарлы атамаһындағы һәр атама һүҙ ҙур хәреф менән башлап яҙыла: *Башҡортостан Республикаһы, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы* һ. б.

4. Илдәге юғары вазифа атамалары һәм хөрмәт исемдәре: *Дәүләт Думаһы, Башҡортостан Республикаһы Президенты, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе, Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры, Советтар Союзы Геройы* һ. б.

5. Илдәге байрам, таныҡлы дата һәм мөһим ваҡиғаларҙы белдергән атамаларҙың тәүге һүҙе: *Белем көнө, Апрель конференцияһы, Яңы йыл байрамы* һ. б.

Дата менән аталған байрам исемендәге һан цифр менән бирелһә – ай исеме, һүҙ менән бирелһә – икеһе лә ҙур хәреф менән яҙыла: *8 Март байрамы – Һигеҙенсе Март байрамы.*

6. Бер нисә һүҙҙең хәрефенән ҡыҫҡартып яһалған атамалар: *РФ, БР, БМО, БДПУ* һ. б.

## Йөкмәткеһе

I. Алфавит һәм орфография принциптары .................... 4
II. Һуҙынҡылар яҙылышы .............................................. 6
III. Тартынҡылар яҙылышы ........................................... 8
IV. Һүҙҙәр һәм ялғауҙар яҙылышы .............................. 12
V. Ҙур хәрефтәр яҙылышы ........................................... 24

Российская академия наук
Уфимский научный центр
Институт истории, языка и литературы

Алфавит и орфография
башкирского литературного языка
*(на башкирском языке)*

Редактор Яйкарова З.И.
Компьютерный набор и вёрстка Каримова Р.Н.


Аа Бб Вв Гг Ғғ Дд Ҙҙ Ее Ёё
Жж Зз Ии Йй Кк Ҡҡ Лл Мм Нн
Ң Оо Өө Пп Рр Сс Ҫ Тт Уу
Үү Фф Хх Һһ Цц Чч Шш Щщ ъ
Ыы ь Ээ Әә Юю Яя